**Аннотация программы**

**по родному башкирскому языку**

**Тәҡдим ителгән был программа рус мәктәбендә туған телде өйрәнгән балалар өсөн**
- яңы быуын дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандарттарына,
-Башҡортостан Республикаһы Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән яҡынса уҡыу планына,
-Мәсәғүт гимназияһының 2017-2018уҡыу йылына төҙөлгән базис уҡыу планының мәктәп компоненты өлөшөнә ярашлы,
-Башҡортостан Республикаһы Мәғариф Министрлығы тарафынан раçланған "Башҡорт теленән программа" (Уҡытыу рус телендә алап барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С., Усманова М.Г. төҙөгән, -Ижевск: "КнигоГрад", 2008й.) **нигеҙендә төҙөлдө**.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- укытыу методик комплекты:**

1.Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А., Карабаев М.И., Аминева З.Р. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -5».- Уфа: «Китап», 2016

2..Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А., Карабаев М.И., Аминева З.Р. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -6».- Уфа: «Китап», 2016;

3.Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А., Карабаев М.И., Аминева З.Р. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -7».- Уфа: «Китап», 2016;

4.Хажин В.И., Вилданов А.Х., Аккужина Ф.А., Карабаев М.И., Аминева З.Р. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте -8».- Уфа: «Китап», 2016;

5. Тикеев Д.С., Ғафаров Б.Б., Хөснөтдинова Ф.Ә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. Рус мәктәптәренең 9-сы класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслеге. – Өфө: Китап, 2006. – 272 бит.

**Туған телде укытыу маҡсаттары:**

.Туған телгә һөйөү, мәҙәниәт күренеше буларак, уға ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү, туған елдең төп аралашыу, кеше эшмәкәрлегенең төрлө сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, әмғиәттә ҡабул ителгән әхләк – этик нормаларҙы үҙләштереү сараһы булыуын аңлау, туған елдең эстетик ҡиммәттәрен үҙләштереү.

. Көндәлек тормошта һәм уҡыу эшмәкәрлегендә туған телдең аралашыу сараһы буларак ҙләштереү; үҙ – ара аңлашыу һәм үҙ – ара фекер алышыуға һәләтлекте үҫтереү; үҙ елмәреңде камиллаштырыу; мөһим төп уҡыу белемен һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәре эшмәкәрлектең маҡсаттарын аныҡ әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү ткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән һәм сығанаҡтарҙан киң мәғлүмәт саралары әм интернаттан тейешле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү һ. б.)

. Тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү, стилистик есурстарҙы һәм төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, лассификациялау һәм тел факттарын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙма һәм һөйләү телмәрен, елмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын, актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; елмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү; белемде, күнекмәне аралашыу роцесында уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген амиллаштырыу.

**Уҡыу предметына дөйөм характеристика.**

**Коммуникатив компетенция** телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр өрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана белеүҙе талап итә. Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, елмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм иәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы әүештә үҙгәртергә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

**Тел һәм лингвистик компетенция**йәмғиәт күренеше буларак, тел тураһында тейешле елемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын ормалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек апасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән буларак лингвистика ураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренешен һәм акттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лингвистик үҙлектәр менән ҡуллана белеү.

**Мәҙәни компетенция** туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма буларак аңлауҙы күҙ ңында тота, тел һәм халыҡ тарихының ьәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли – әҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, халыҡ –ара аралашыу әҙәниәтен үҙләштереү; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

Башҡорт теле курсының коммуникатив – эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәтеү кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәләтле һәм нда әүҙем эшмәкәрлекте дауам итеүгә һәләтле буларак, функциональ грамоталылыкты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

Функциональ грамоталылыҡтың мөһим индикаторы – предмет – ара статус: **коммуникатив ниверсаль уҡыу эшмәкәрлеге** (телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү,

иңдәштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу; һөйләү һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү, ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк һәм тасуири өйтеп биреү, аралашыу процесында телдән һәм яҙма телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетын һаҡлау); **танып белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге** (проблеманы асыҡлау, дөрөҫ аргументлай белеү, логик яҡтан дөрөҫ фекер йөрөтөү, иҫбатлау, раҫлаусы йә кире ҡағыусы тезис килтереү; библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү, уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып уҡыу төрөн һайлау мәғлүмәти – компьютер сараларын ҡулланыу; мәғлүмәтте ситемаға килтереү һәм киренән эшкәртеү һәм уны төрлө ысулдар меән күрһәтеү һ. б***.); регулятив*** **универсаль уҡыу эшмәкәрлеге** (эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм аныҡ итеп әйтә белеү, эшмәкәрлекте эҙмә – эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү; үҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ коррекциалау һ. б. тормошҡа ашырыу.) Функциональ грамоталылыҡтың мөһим компоненты телмәр эшмәкәрлеге төрҙәренә нигеҙләнә һәм мәктәптә туған телде өйрәнеү аша уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен маҡсатлы йүнәлештә үҫтереүҙе күҙ уңында тота.
Функциональ грамоталылыҡты формалаштырыу, уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыу башҡорт теленең төҙөлөшө һәм аралашыуҙың төрлө шарттарында уны ҡулланыу үҙенсәлетәрен белеү нигеҙендә төҙөлә. Уҡыу процесы телде анализлау күнекмәләрен формалаштырыуға ғына йүнәлдерелгән булырға тейеш түгел, ә шулай уҡ телмәр мәҙәниәтен тәрбиәләү, тормошта мөһим күнекмәләрҙе формалаштырыу, төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу, тексты мәғлүмәти эшкәртеү, мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү, телмәр ситуацияһына, әҙәби тел нормаларына һәм аралашыуҙың этик нормаларына яраҡлы төрлө ысулдарын файҙаланыу. Шулай итеп, төп дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтерергә, артабан уҡыуын төрлө белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.

**Туған телдең уҡыу планындағы урыны.**

Башҡортостандың башҡорт телендә уҡытылған дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн йыллыҡ өлгө планы туған телен 340 сәғәт күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота: 5 -се класс – 68, 6 – сы класс – 68, 7-се класс – 68, 8 –се класс – 68, 9-сы класс – 68 сәғәт.

**Программаның йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө.**

Рус һәм башҡа мәктәптәрҙә телде белмәгән балаларға туған телде өйрәтеүҙең байтаҡ үҙенсәлектәре бар. Уларҙың иң мөһимдәрен һанап китәбеҙ:

-Туған телде башланғыс кластарҙа алған белем һәм күнекмәләрҙе талаптарға ярашлы практик йүнәлештә тәрәнәйтеү, башҡорт теленең өндәр системаһы, лексик байлығы, морфологик категориялары һәм синтаксик төҙөлөшө тураһында белем биреү.

- Башҡорт теле мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**5 кластапрограмма йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:**

- башҡортса телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу;
- башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау һәм үҙләштереү;

– бәйләнешле текст менән эш итә белергә өйрәтеү.

**5 кластаукытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

Тел буйынса башланғыс синыфтарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Фонетика һәм орфоэпия. Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең өндәр системаһы.
Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Һуҙынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше.
Тартынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше.
Башҡорт телендәге к-г, һ-х, н-ң, с-ç, з-ҙ тартынҡыларының дөрөç әйтелешенә күнекмәләр үткәреү, фонетик күнегеүҙәр эшләү.
Башҡорт телендә сингармонизм.
Башҡорт телендә ижектәр. Ижектәрҙең төрҙәре. Башҡорт һәм рус телдәрендәге ижектәрҙе сағыштырыу.
Башҡорт телендә баçым, уның үҙенсәлектәре.
Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең тамыры, ялғауҙар тураһында төшөнсә биреү.
Башҡорт һәм рус телендә интонация һәм уның төрҙәре, төп өлөштәре: логик баçым, пауза, фраза баçымы, телмәр мелодикаһы, тойғо баçымы.
Башҡорт теленең һүҙлек байлығы, уның сығанаҡтары. Төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы.
Башҡорт телендә нығынған һүҙбәйләнештәр, улар аңлатҡан мәғәнәне асыҡлау.
Башҡорт телендә һүҙъяһалыш. Һүҙ составы. Тамыр. Нигеҙ. Ялғауҙар. Ялғауҙарҙың төрҙәре: һүҙ һәм төр яһаусы ялғауҙар, үҙгәртеүсе ялғауҙар.
Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөç яҙылышын үҙләштереү.

**Башҡорт телен уҡытыуҙың икенсе баçҡысы 5-9-сы кластарға тура килә.**

**6 -7 класта уҡытыуҙың маҡсаты** – башланғыс кластарҙа алған белем һәм күнекмәләрҙе икенсе баçҡыс талаптарына ярашлы практик йүнәлештә тәрәнәйтеү, башҡорт теленең өндәр системаһы, лексик байлығы,морфологик категориялары һәм синтаксик төҙөлөшө тураһында белем биреү.

**6 класта укытыу предметының төп йөкмәткеһе :**

Туған тел буйынса алдағы кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Һүҙ төркөмдәре турһында төшөнсә.Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Исем.
Исемдәрҙең һан, эйәлек, килеш һәм хәбәрлек категориялары.
Исем, сифат.Исем буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, дөйөмләштереү.
Тамыр, яһалма, ҡушма сифаттар.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр.
Сифаттарҙың үҙгәреше.
Алмаш.Төп үҙенсәлектәре.
Һандар. Ябай һәм ҡушма һандар. Һандардарҙың телмәрҙә ҡулланылышы.

**7 кластапрограмманың йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө:**

Туған телде өйрәнеү курсы 7 класта түбәндәгесә: үтелгәнде ҡабатлау,фонетика, һүҙъяһалыш,ҡылым, үҙаллы һәм ярҙамсы ҡылымдар, ҡылым һөйкәлештәре, ҡылым төркөмсәләре, рәүеш (төркөмсәләре, дәрәжәләре) ярҙамсы һүҙ төркөмдәре (теркәүестәр, бәйләүестәр, киçәксәләр, ымлыҡтар) буйынса темалар ҡаралған.

**8 кластапрограмманың йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө:**

Туған телде өйрәнеү курсы 8 класта түбәндәгесә: үтелгәнде ҡабатлау, синтаксис һәм пунктуация (һүҙбәйләнеш, ябай һөйләм, һөйләмдең баш һәм эйәрсән киçәктәре,бер

составлы һөйләмдәр, хәлдәрҙең айырымланыуы,инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр, тура телмәрле һөйләмдәр) буйынса темалар  ҡаралған.

**9 кластапрограмманың йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө:**

Туған телде өйрәнеү курсы 9 класта түбәндәгесә: үтелгәнде ҡабатлау, синтаксис һәм пунктуация (ҡушма һөйләм,тиң киҫәктәр,тиң киҫәктәр янындағы дөйөмләштереүсе һүҙәр, һөйләм аҙағында тыныш билдәләре, морфологоия, синтаксис буйынса ҡабатлау) буйынса темалар  ҡаралған.

**8- 9класта** уҡытыуҙың маҡсаты – түбәнге кластарҙа алған белем һәм күнекмәләрҙе икенсе баҫҡыс талаптарына ярашлы практик йүнәлештә тәрәнәйтеү, башҡорт теленең өндәр системаһы, лексик байлығы,морфологик категориялары һәм синтаксик төҙөлөшө тураһында белем биреү. Туған тел  мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә.